# “Ақ қағыз”

- Аҡ ҡар
- Аҡ уй
- Аҡ өй, тирмә
- Аҡ икмәк
- Аҡ бәхет
- Аҡ йылан
- Аҡ юл
- Аҡ сәс
- Аҡ һөйәк
- Аҡ билет
- Аҡ ҡағыҙ

- Аҡ ҡар - таҙа
- Аҡ уй- изге
- Аҡ өй, тирмә- ҡунаҡ өйө
- Аҡ икмәк- юғары сортлы ондан бешерелгән
- Аҡ бәхет-шатлыҡ, ҡыуаныс
- Аҡ йылан-йыландар батшаһы
- Аҡ юл-хәйерле юл
- Аҡ сәс-сал сәс
- Аҡ һөйәк- юғары ҡатлам кешеһе; эш яратмаған кеше
- Аҡ билет-хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡ
- Аҡ ҡағыҙ- ?
-





- **Ап-аҡ ҡағыҙ бите… Буш һәм өнһөҙ. Әммә…таҙа . Ә бит был уның төп өҫтөнлөгө.Тимәк, ижад итеү, хыялды эшкә ҡушыу өсөн урын бар.**

- Бала күңеле - аҡ ҡағыҙ.

# Рәми Ғарипов “Туған тел”

- Мин халҡымдың сәскә күңеленән,
- Бал ҡортондай, ынйыы йыямын,
- Йыямын да - йәнле ынйыларҙан
- Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.
- Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
- Бер телдән лә телем кәм түгел –
- Көслө лә ул,бай ҙа яғымлы ла,
- Кәм күрер тик уны кәм күңел!..
- Халҡым теле миңә – хаҡлыҡ теле –
- Унан башҡа минең илем юҡ:
- Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
- Иле юҡтың ғына теле юҡ!
- Әсәм теле миңә – сәсән теле,
- Унан башҡа минең халҡым юҡ :
- Йөрәгендә халҡы булмағандың
- Кеше булырға ла хаҡы юҡ!